*Приложение №2*
*к рабочей программе по государственному (башкирскому) языку Республики Башкортостан,*
*утв.пр.№ 116 от 29.08.2022 г.*

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа
имени Талгата Лутфулловича Рахманова с.Верхнеяркеево
муниципального района Илишевский район Республики Башкортостан

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ
им.Т.Рахманова с.Верхнеяркееево
_______________ Шафикова Г.И.
№ пр.116 от «29» августа 2022 г.

# Контрольно-измерительные материалы промежуточной аттестации и критерии оценивания

государственному (башкирскому) языку
Республики Башкортостан
(название курса)

Уровень общего образования
(начальное, основное, среднее) основное
Класс 5
Учителя: Фахруллина Г.А.,Валиева И.И.,Каримова З.М.

2022 г.

**Контроль-үлсәү материалдары**

5 класс

Контроль диктант

Ағиҙел

Тигеҙ ерҙәрҙең күп өлөшө ҡарҙан асылғас, Иҙелдә боҙ асылды. Беҙ быны күптән көтә инек инде.

Таҙа һыулы йылға, ҡалын боҙҙарҙы емереп, тулай башлаған. Үҙенең өҫтөндә ҙур-ҙур боҙ киҫәктәрен өйөрөп, тағы ла ҙурыраҡ боҙға килтереп бәрә , боҙ өҫтөнә боҙ менә. Ул арала тағы бер киҫәк килеп һуғыла. Йылға шаулай, ашҡына, ярһып ярҙарынан сыға.

1.Нимә ? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе табырға.
2.Боҙ киткәнен күргәнегеҙ бармы?
3. Яңғыҙлыҡ исемдең аҫтына һыҙығыҙ.
(Функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш төрө- задание по функциональной грамоте)

Контроль диктант

Ер

Бына тау. Бөтә тигеҙлектәр өҫтөнән ҡалҡып, күҙәтеп тора ул . Ул тыныс.

Бына урман. Меңләгән ваҡ һәм эре тормоштоң бөтә тауыштары менән шаулап тора ул урман.

Бына йылға. Тулҡындар менән ярышып аға ул йылға. Ә йылғаның теге һәм был яҡ ярҙарында, онотолмаҫлыҡ иҫтәлек булып, аҙмы ни тулҡынлы айҙар һаҡлана!

Был-ер. Яҡын да был ер, йылы ла был ер, һөйөклө лә был ер.

1.Нимә тураһында һүҙ бара?
2.Беҙҙә ниндәй йылғалар бар? Исемдәрен әйтегеҙ.
3.Исемдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ

(Функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш төрө- задание по функциональной грамоте)

Контроль диктант

Айыу

Айыу – беҙҙең яҡ йыртҡыс йәнлектәре араһында иң ҙуры. Уның буйы ике метрҙан да оҙон, ә ауырлығы биш йөҙ килограмға етә. Көрән айыуҙар ҡуйы урман эсендә йәшәй.

Айыу иҫ киткес көслө. Ул алғы аяғы менән һуғып аттың, мышының һыртын еңелһындыра ала. Уның атлауы ла үҙенә бер төрлө: аяғының үксәләрен ситкә тарбайтып,бармаҡтарын эскә ҡаратып баҫа. Ул шәп йүгерә, яҡшы йөҙә.

1.Айыу тураһында нимә белдегеҙ? Беҙҙә ниндәй айыуҙар йәшәй?

2.Ни эшләй? һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

(Функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш төрө- задание по функциональной грамоте)

Контроль диктант

Урманда

Ҡайын урманын бәшмәктәр ҙә ярата. Иң мул булып үҫкәне – ҡайын бәшмәктәре инде.

Ҡайынлыҡта бүтән бәшмәктәр ҙә етерлек үҫә. Бында әтәс бәшмәктәр ҙә бар. Былары ҡупшы әтәстәргә оҡшаған.

Нисә төрлө бәшмәк бар – барыһы ла ҡайынлыҡты һөйә. Ә ҡайынлыҡта үҫкән аҡ бәшмәктәрҙе мин бәшмәктәр батшаһы тип атар инем. Урманда үҫкән ҡайындар ҙа аҡ,бәшмәктәр ҙә аҡ.

1.Һеҙ ниндәй бәшмәктәрҙе беләһегеҙ? Бәшмәк йыйырға яратаһығыҙмы?

2.Бәшмәктәрҙең исемдәрен әйтегеҙ .

3. Текстағы бәшмәк исемдәренең аҫтына һыҙығыҙ.

(Функциональ грамоталылыҡты үҫтереүгә эш төрө- задание по функциональной грамоте)